# **РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**
по предмету **Родной (башкирский) язык и литература**

## I. Пояснительная записка

**Рабочая программа учебного предмета «Родной башкирский язык и литература» разработана на основе следующих нормативно-правовых документов:**

1. **Федерального закона от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ "Об образовании в Российской Федерации"**;

4 Приказа № 1089 от 5 марта 2004 "Об утверждении федерального компонента государственных образовательных стандартов начального общего, основного общего и среднего (полного) общего образования" (в соответствии с изменениями);

2. Приказа от 9 марта 2004 г. N 1312 Об утверждении федерального базисного учебного плана и примерных учебных планов для образовательных учреждений Российской Федерации, реализующих программы общего образования;
3. Постановления Главного государственного санитарного врача РФ от 29 декабря 2010 № 189 «Об утверждении СанПиН 2.4.2.2821-10 «Санитарно-эпидемиологические требования к условиям и организации обучения в общеобразовательных учреждениях»;
4. Закона "О языках народов Российской Федерации" (с изменениями и дополнениями) от 25 октября 1991 г. № 1807-I
5. Закона Республики Башкортостан «Об образовании в Республике Башкортостан» от 1 июля 2013 г. № 696-з;
6. **Концепции развития национального образования в Республике Башкортостан от 31 декабря 2009 г. № УП-730,Республиканской общеобразовательной программы развития образования на 2013-2017 годы от 30.12.2012 г.№549 с изменениями от 24.10.2013.№473;**
7. **Закона «О языках народов Республики Башкортостан»** (с изменениями и дополнениями) **от 15 февраля 1999 года № 216-з;**
8. Регионального базисного учебного плана и примерных учебных планов для общеобразовательных учреждений Республики Башкортостан, реализующих программы общего образования (Приказ министерства образования РБ № 824 от 06 мая 2014 года);
9. **Нормативной базы по предмету башкирский язык составлена в соответствии с программой по башкирскому языку для учащихся I-XIклассов школ с русским языком обучения. Составители: Усманова М.Г., Габитова З.М.-Уфа.2009.**

10. Учебного плана МАОУ Школа №37 г. Уфа Приказ № 357 от «31» мая 2016 г.(с изменениями Приказ№853 от 14 12.2015)

11. Положения о рабочей программе МАОУ Школа №3 7 Приказ № 226 от « 18.04» 2016 г.

**Аңлатма яҙыу**

Башҡорт теле курсы дөйөм белем биреү мәктәбенең предметтар системаһында донъяны танып белеү һәм социомәҙәни маҡсаттарҙы тормошҡа ашыра.

Донъяны танып белеү маҡсаттары уҡыусыларҙы тел тураһындағы фәндең тел тураһындағы фәндең төп нигеҙҙәре менән таныштырыуҙы һәм уның менән бәйләп уларҙың билдә-символдар ярҙамында ҡабул итеүен,

фекерләүен, күҙ алдына килтерә алыуын формалаштырыуҙы аңлата.

Башҡорт телен өйрәнеүҙең социомәҙәни маҡсаттары кешенең дөйөм мәҙәни үҫеше күрһәткесе булараҡ, уҡыусының коммуникатив компетенцияһын, һөйләү һәм яҙма үҫешен үҙ эсенә ала.

Башҡорт булмаған мәктәптәрҙә балаларҙың өс төркөмгә бүленеүен иҫәпкә алырға кәрәк. Былар түбәндәгеләр:

Башҡорт мөхитендә тыуып үҫкән һәм башҡорт мәктәбендә әсә телендә уҡыған балалар.

1 Башҡорт мөхитендә үҫмәгән, рус һәм башҡа телдә эшләүсе мәктәптәрҙә белем алған,башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнгән балалар.

2 Башҡорт телен белмәгән һәм башҡа милләт балалары. Улар рус мәктәптәрендә белем алалар, башҡорт телен предмет булараҡ, практик күҙлектән сығып өйрәнәләр.

**Уҡытыуҙың маҡсаты һәм бурыстары.**

уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә,йәмәғәт урындарында,хеҙмәт процесында

башҡорт телен практик файҙаланырға башҡорт теленең фонетик,лексик,грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү;

башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы,әҙәби китаптарҙы үҙ-аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү;

үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу;

телде өйрәнеү  барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы,бай мәҙәниәте,сәнғәте,әҙәбиәте,башҡорт йолалары,

күренекле    шәхестәре,тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу,уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү,башҡорт  халҡына,

уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү;

**Норматив хоҡуҡи документтар**

7  класс өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән эш программаһы Тикеев Д.С.,Хажин В.И., Толомбаев Х.А.,Вилданов, Ә.Х.,Дәүләтшина,М.С.,ХөснөтдиноваФ.Ә. авторлығында  төҙөлгән уҡытыу рус телендә

алып барылған мәктәптәрҙең 1-11 кластары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте программаһы (2008) нигеҙендә төҙөлгән.

**Уҡыу предметының дөйөм характеристикаһы.**

Башҡорт телен уҡытыуҙың икенсе баҫҡысы 5-9-сы кластарға тура килә. Уның маҡсаты: башланғыс кластарҙа алған белем

һәм күнекмәләрҙе икенсе баҫҡыс талаптарына ярашлы практик йүнәлештә тәрәнәйтеү, башҡорт теленең өндәр системаһы,   лексик байлығы, морфологик категориялары һәм синтаксик төҙөлөшө тураһында белем биреү.

Күп милләт халыҡтары төйәк иткән Башҡортостанда, башҡа милли республикаларҙағы кеүек үк, төп аралашыу теле булып рус теле хеҙмәт итә.

Рус теле аша башҡорт халҡы ла, рус булмаған башҡа милләт халыҡтары ла илебеҙ, донъя әҙәбиәте, мәҙәниәте, сәнғәте

һәйбәт йолалары, йәғни рухи байлыҡтары менән таныша. Юғары уҡыу йорттарына абитуриенттар рус теле һәм әҙәбиәтенән һынау тапшырып инә.

Башҡортостан Республикаһы Президентының Указы менән 1999 йылдың 15 февралендә башҡорт теле,

рус теле менән бер рәттән республикала дәүләт теле тип ҡабул ителде. Рус телендә белем биреүсе мәктәптәрҙә

уҡыусы   балаларына туған телен өйрәнә алһын өсөн мөмкинлектәр тыуҙырылды.

**Предметтың уҡыу планындағы урыны.**

Туған башҡорт теле һәм әҙәбиәте предметы 7 класта база кимәлендә өйрәнелә. 37-се мәктәптең уҡыу планында предметҡа аҙнаһына 1 сәғәт бүленгән, йылына 35 сәғәт тура килә.

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән,метапредмет,предмет һөҙөмтәләре**

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнгәндә уҡыусыларҙың дөйөм телмәр үҫеше стимуляциялана; коммуникатив мәҙәниәте үҫә; дөйөм ҡиммәттәргә ориентацияһы формалаша һәм дәрестә аралашыу процесында,

балалар фольклоры үрнәктәре һәм текстар менән танышҡанда әхләҡи тәрбиә нигеҙҙәре барлыҡҡа килә; сит мәҙәниәткә ҡарата толерантлыҡ формалаша.

Шәхси һөҙөмтәләр

Башҡорт телен 7 класта өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле

йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү үҙенде илдең гражданины итеп тойоу; телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү;

башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

Метапредмет һөҙөмтәләр

Уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү; уҡыусының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү;

башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу; уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**Предмет һөҙөмтәләре**

Башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс белешмә; (курс йөкмәткеһе кимәлендә) өн, хәреф, һүҙ кеүек тел берәмектәрен табыу һәм сағыштырыу һәләте.

**А.** Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә) телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:

һөйләү телмәрендә: аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу; элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;

тыңлап аңлауҙа: уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы;

аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

**Б.** Танып белеү сфераһы: айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр,

ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;

башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә

өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү; ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү; үҙ-үҙеңде башланғыс класс

уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

**В.** Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында: башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г.** Эстетик сферала: башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү; балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.

**Д.** Хеҙмәт сфераһында: уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Әкиәттәр - 4 сәғәт.**

Әкиәттәр тураһында түбән кластарҙа үткәнде иҫкә төшөрөү. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. «Етем төлкө», «Айыу мөнән бал ҡорттары». Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма», «Әбйәлил». Тормош-көнкүреш әкиәттәре «Алтын тамсы», «һаранбай менән Зиннәт ағай».

Әкиәттәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү. Исемдәр биреп план төҙөргә өйрәтеү.

Әҙәбиәт теорияһы. Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау.

**Риүәйәт һәм легөндалар - 4 сәғәт.**

Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Уларҙың тематик бүленеше, оҡшаш һәм айырма яҡтары. Ер-һыу, ырыу-ҡәбилә тарихы: «Етегән йондоҙ», «Ай менән Зөһрә». Ырым-ышаныу: «Сыңрау торна». Тарихи риүәйәттәр: «Бошман ҡыпсаҡ батыр». Тормош-көнкүреш риүәйәте: «Ғилмияза»

Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ, барлык-юҡлык формалары. Ҡылымдарҙың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик таныштырыу күнегеүҙәре. Төп йүнәлештән башҡа ҡылым йүнәлештәренең айырым ялғауҙары булыуын күрһәтеү һәм башҡорт телендә биш йүнәлеш: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше һәм уртаҡлыҡ йүнәлеше барлығын практик миҫалдарҙа күрһәтеү.

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заман формалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәге була алыуы.

Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреш

.

**Алтын күҙ - 1 сәғәт.**

М.Тажи «Алтын көҙ», Ф.Рәхимғолова «Көҙ» шиғырҙарында көҙгө тәбиғәттең, көҙ билдәләренең һүрәтләнеше.

Әҙәбиәт теорияһы: Поэтик телдәге һүрәтләү сараларын ҡабатлау. Метафора тураһында төшөнсә.

М.Ғафури. «Ҡыр ҡаҙы» хикәйәһенең идея-тематик йөкмәткеһе. Малайҙың һәм уның атаһының ҡыр ҡаҙына ҡарата мөнәсәбәте. Хикәйәлә ҡоштарға, хайуандарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү һәм ярҙам итеү мотивы. Кеше һәм тәбиғәт темаһына әңгәмә үткәреү.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе.

**Уҡыу - белем шишмәһе - 1 сәғәт.**

Раил Байбулатов. «Нурлы күҙҙәр». Теләк һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

**Дуҫлыҡта – берҙәмлек – 1 сәғәт.**

Б.Бикбай. «Рус теле», Р.Сафин. «Дуҫлыҡ». Был шиғырҙарҙа дуҫлыҡты данлау. Ысын дуҫлыҡты баһалау. Рус һәм башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡҡа һоҡланыу, ғорурланыу тәрбиәләү.

**Хеҙмәте юҡтың - хөрмәте юҡ - 4 сәғәт.**

М.Ғафури. «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырында эшсәнлек, дуҫлыҡ һәм дошманлыҡтың ҡапма-ҡаршы һүрәтләнеүе.

Ж.Кейекбаев. «Оморҙаҡ бабай». Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Оморҙаҡ бабай образына хас сифаттар.

Ҡылымдарҙың затһыҙ формалары: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым. Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе.

**Башҡортостан-ғәзиз ерем - 2 сәғәт.**

Ә.Үтәбай. «Башҡортостан» шиғырында лирик геройҙың кисерештәрендә Башҡортостан, Тыуған ил образы.

Сифат ҡылыме.

**Ап-аҡ карҙар яуа - 5 сәғәт.**

К.Кинйәбулатова. «Һаумы, аҡ ҡыш!», Ш.Бикколов. «Урман», Ә.Әхмәт-Хужа. «Эй, Ҡыш бабай, Ҡыш бабай!», Г.Ғәлиева. «Ҡарһылыу». Шиғырҙарҙа ҡыш миҙгеленең, тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше.

Хәл ҡылым.

Ҡылымдарҙы дөйөмләштереп кабатлау.

**Ил намыҫы - ир күңелендә - 1 сәғәт.**

Р.Шәкүр. «Һаҡта тора илдең улдары» шиғырында Тыуған илде, тыныслыҡты һаҡлаусы ил улдары образдары.

Рәүештәр. Уларҙың мәғәнәләре.

Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре. Рәүештәрҙеңтелмәрҙә ҡулланылышы.

**Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр - 11сәғәт.**

Г.Юнысова «Әсәйҙәр байрамы», «Йырлайым әсәйҙәр тураһында» (йыр). Ф.Мөхәмәтдинов «Әсәйем ҡулы» шиғырҙарҙын һәм йырҙы тасуири уҡыу. Әсәйҙәр изгелегенең, бөйөклөгөнөң сағылышы.

Г.Яҡупова. «Әсәйҙәр ниңә ҡартая?», «Мейес әбей».

Әсә менән бала, ейән менән өләсәй мөнәсәбәттәрө тураһында әңгәмә ойоштороу.

**Яҙма эш төрҙәре һәм һаны**

**Контроль эштәр:**

**Диктант-4**

**Инша-1**

**Изложение-1**

**Календарь-тематик планаштырыу  Класс –,7 б,в.**

| Дәрестең иҫә-бе | Дәрестең темаһы | Сәғәт-тәр һаны | Үткәрелеү ваҡыты | | Уҡыу эшмәкәрлегенә характеристика |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | план | фактик | |
| | | | | | |
| 1 | Халыҡ ижады тураһында. Әкиәттәр. | 1 | | | Башҡорт теле буйынса алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. |
| 2 | Фонетика, һүҙъяһалыш, морфология тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | | | Әҫәрҙе уҡыу, анализлау. |
| | | | | | |
| 3 | Риүәйәттәр һәм легендалар. | 1 | | | Инеү диктанты яҙыу. |
| 4 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Ҡылым һөйкәлештәре. | 1 | | | Әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләү. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 5 | Йырҙар. Йырҙар тураһында. | 1 | | | Үҙ аллы һәмярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Исем. |
| | | | | | |
| 6 | Таҡмаҡтар. Таҡмаҡтар тураһында. | 1 | | | Әкрәм Бейештең ижады менән танышыу. |
| 7 | Таҡмаҡтар тураһында | 1 | | | Әҫәрҙе уҡыу, анализлау. |
| 8 | М.Ғафури"Ҡыр ҡаҙы" | 1 | | | Контроль диктант яҙыу. |
| 9 | Контроль диктант"Көҙ етте" | 1 | | | Хаталар өҫтөндә эш эшләү. Һүрәтләү сараларын табыу. |
| 10 | Хаталар өҫтөндә эш Р.Байбулатов"Күңел күҙҙәре" | 1 | | | Ҡиссаны уҡыу. |
| 11 | Н.Мусин"Тайғаҡ баҫма".Теләк һөйкәлеше | 1 | | | Бәйетте уҡыу. |
| | | | | | |
| 12 | Б.Бикбай"Рус теле" | 1 | | | Сифат. Сифат дәрәжәләре. Дәрәжә формаларының яһалышы. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 13 | Р.Байбулатов"Һарыбай" | 1 | | | “Осто бөркөт” әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһе менән танышыу. |
| | | | | | |
| 14 | Ә Бикчентаев"Бакенщиктар илаҡ булмай".Шарт һөйкәлештәре | 1 | | | Башҡорт халыҡ йыры менән танышыу. Исем буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау,дөйөмләштереү. |
| | | | | | |
| 15 | М.Ғафури"Гөлдәр баҡсаһында" | 1 | | | Тамыр, яһалма, ҡушма сифаттарҙы табыу.<br>Башҡортостан йылғалары тураһында белешмә биреү. |
| | | | | | |
| 16 | Ж.Кейекбаев"Оморҙаҡ бабай" | 1 | | | Контроль диктант яҙыу. |
| 17 | Ж.Кейекбаев Туғандар һәм таныштар.Ҡылым төркөмсәләре | 1 | | | Өфө тураһында видеофильм ҡарау. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | |
| 18 | Инша"Тыуған ерем" | 1 | | | Башҡорт йолалары тураһында белешмә биреү. Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнеш-тәр төҙөү. |
| | | | | | |
| 19 | Ә Үтәбай"Башҡортостан.Уртаҡ ҡылым | 1 | | | Башҡорт халҡының милли аштары тураһында белешмә биреү. Сифат темаһын ҡабатлау. |
| | | | | | |
| 20 | Изложение"Тейен менән бүре" | 1 | | | “Башҡорт теле” шиғырын тасуири уҡыу. Рус телендәге алмаштар менән сағыштырыу, тәржемә күнекмәләре үткәреү. |
| 21 | Хаталар өҫтөндә эш.М.Кәрим"Ҡайын япрағы" | 1 | | | Килтерелгән текстарҙан алмаштарҙы табыу. Алмаштарҙың башҡорт телендә мәғәнә үҙенсәлектәрен, |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | төркөмсәлерен, телмәрҙә ҡулланыу. |
| | | | | | |
| 22 | К.Кинйәбулатова"Һаумы,аҡ ҡыш" | 1 | | | Әҫәрҙе уҡыу, анализлау. |
| 23 | | 1 | | | Әҫәрҙе уҡыу, һөйләү. |
| | | | | | |
| 24 | Ә.Әһлиуллин"Биҙәкле сана" | 1 | | | Әкиәтте уҡыу, анализлау. |
| 25 | Р.Шәкүр"Һаҡта тора илдең улдары".Рәүеш | 1 | | | Образдарға ҡылыҡһырлама биреү. |
| | | | | | |
| 26 | Һ.Дәүләтшина"Айбикә" | 1 | | | Контроль диктант яҙыу. |
| 27 | М.Кәрим"Оҙон оҙаҡ баласаҡ" | 1 | | | Башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлау. |
| 28 | Контроль диктант"Яҙ" | 1 | | | Көләмәстәр уҡыу. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 29 | Хаталар өҫтөндә эш.Г.Юнысова"Әсәйҙәр байрамы" | 1 | | | Һандар темаһын үҙләштереү. |
| | | | | | |
| 30 | Г.Яҡупова "Мейес әбей".Теркәүестәр | 1 | | | Г Яҡупованың тормош юлы менән танышыу, ижадтарына ҡыҫҡаса күҙәтеү яһау, уларҙың башҡорт әҙәбиәте тарихында урыны тураһында фекер алышыу. |
| 31 | Р.Ниғмәти "Яҙ килде" | 1 | | | Әҫәрҙе уҡыу, анализлау. |
| 32 | М.Ғафури"Болон".Мөнәсәбәт һүҙҙәр | 1 | | | Биография һәм автобиография тураһында төшөнсә биреү. |
| | | | | | |
| 33 | Р.Ғарипов"Һабантурғай" | 1 | | | Дуҫлыҡ хаҡында әңгәмәләшеү. |
| 34 | Контроль диктант"Йәй" | 1 | | | Контроль диктант яҙыу. |
| 35 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Йомғаҡлау | 1 | | | Йыл буйына үтелгәндәрҙе |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | дәресе | | | | ҡабатлау, дөйөмләштереү. |

Иҫкәрмә: дөйөм сәғәттәр һаны календарь график, 2016-2017 йылғы уҡытыусылар календары һәм дәрестәр теҙмәһе буйынса йылына 35 сәғәт.